**Һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ,схемаһын төҙөгөҙ.**

Бына хәҙер ат ҡуҙғалыр ҙа, Нәфисәләр бейек тау түбәһенән башҡа донъяға елдәй елеп килеп инерҙәр. (Ш.Янбаев.) Зифанан һуң ҡайғы уртаҡлашырға ҡарсыҡтар килде, тағы әллә кемдәр инеп сыҡты. (Ф.Әсәнов.)
Батша һалдаттары был урманды нисәмә тапҡыр һөҙөп сыҡҡан, әммә Хәбир батыр табылмаған. (З.Биишева.)
Ысын кеше ике йөҙлө була алмай, юҡһа ул үҙенең иманына, йәшәү идеалына хыянат итер ине. (Х.Ғиләжев.)
Ҡуянтубыҡ соҡоп йөрөгән ҡыҙҙарҙың бөксәйгән арыҡ арҡаларын берсә эҫе ҡояш ҡыҙҙырҙы, берсә еүеш, һалҡын ел ҡапшаны. (З.Биишева.) Әллә ҡояшты ниндәйҙер көс кире яҡҡа тарта, әллә ҡулындағы сәғәте туҡтап ҡалған. (Н.Мусин.)

**Һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ,схемаһын төҙөгөҙ.**

Юл кәмендә өс километрға ҡыҫҡараҡ та, тигеҙ ҙә, тимәк, машиналарға шаҡтай күберәк тейәргә мөмкин буласаҡ. (Д.Исламов.) Ул маяҡтарҙы кешеләр ҡулы тоҡандыра, йәғни кешеләр уларға үҙҙәренең аҡыл яҡтыһын, рух йылыһын, өмөт нурҙарын һалып ҡалдыралар. (М.Кәрим.) Ул миңә фронт хәлдәрен һөйләне, мин уны Мәскәү яңылыҡтары менән таныштырҙым. (Д.Юлтый.)
Кем һуңғы көлтәне бәйләп ташлай, шул еңә.

Үтте ҡыш, килде матур яҙ, көҙ көнө киткән матур ҡоштар тағы ла килделәр. (М.Ғафури.)